*Тәнзилә ҮЛМӘСБАЕВА,*
*Башҡортостан радиокомпанияһының баш мөхәррире*

# ӨФӨ ҺӨЙЛӘЙ

ӨФӨ ҺӨЙЛӘЙ
ӨФӨ ҺӨЙЛӘЙ

*Ғәжәйеп тылсым көсөнә эйә булған был һүҙҙәр бына 70 йылдан ашыу республиканы иңләй, күрше өлкәләргә сәләм илтә, Япония, Америка, Австралия кеүек йәһәннәмдә ятҡан илдәргә барып етә, Башҡортостан тигән йөмһүриәтебеҙҙең йәшәйеше менән таныштыра, уйландыра, моңландыра. Ҡыҫҡаһы, бөгөн ул тормош уртаһында ҡайнап-гөрләп йәшәй. Уның үткәндәре лә ил, халыҡ яҙмышы менән айырылғыһыҙ бәйләнгән.*

## ТАРИХИ СӘЙӘХӘТ

Башҡортостан радиоһы үҙенең даими тапшырыуҙарын 1928 йылдың 1 августында башлай. Техника һөйөүселәрҙең ҡулдары менән йыйылған беренсе радиоалғыстарҙан алып заманса үҫешкән матди-техник базаһы булған радио тапшырыуҙар системаһын булдырғансы 70 йылдан ашыу ғүмер үткән. Башҡортостанда был осор халыҡ хужалығын социаль һәм техник йәһәттән үҙгәртеп ҡороуҙың яңы осорона инеүе менән тап килә. 20-се йылдар уртаһында күп ҡала һәм районлар халҡын мөһим ваҡиғалар менән таныштырып барырға мөмкинлек биргән радио тапшырыуҙар булдырыу талап ителә. 1924 йылда Халыҡ Комиссарҙары Советы ултырышында беренсе тапҡыр Өфөлә киң тапшырыуҙар алып барыусы радиостанция төҙөү тураһында мәсьәлә ҡарала. Төҙөлөш 1927 йылдың ноябрендә тамамлана. Радиостанцияны асыу республиканың ижтимағи һәм сәйәси тормошонда мөһим ваҡиғаға әүерелә. Тантана 7 ноябрҙә үтә. Был көндө майҙандарҙа, клуб, китапханаларҙа радиоалғыстар эргәһенә йыйылған халыҡ беренсе тапҡыр “Өфө һөйләй!” тигән һүҙҙәрҙе ишетә. Уларҙы башҡорт һәм рус телдәрендә тәүге дикторҙар З.Исмәғилова һәм Е.Цибульская еткерә. Ошо осорҙан алып радио республика тормошонда мөһим урын ала бара. Даими эшләй башлаған радиостанция бөгөнгө күҙлектән техник яҡтан камил булмаһа ла, тәжрибәле журналистар, техник белгестәр етешмәһә лә республика тормошоноң был этабында уның роле ҙур була. Шуныһы үкенесле, 70 йылдан ашыу ғүмер кисергән Башҡортостан дәүләт эфирының ташҡа баҫылған, китап булып донъя күргән тарихи йылъяҙмаһы юҡ. Был, беренсенән, бөгөнгө быуын тыңлаусылары өсөн үткәндәр менән танышыу мөмкинлеген сикләй. Икенсенән, 90-сы йылдар башында ижади составын тулыһынса тиерлек яңыртҡан редакциялар әлегәсә тәжрибә туплау йәһәтенән билдәле ауырлыҡтар кисерә. Башҡортостан радиоһының ҡыҙыҡһынып өйрәнерлек, ғорурланып иҫкә алырлыҡ бай тарихы бар һәм ул, һис шикһеҙ, журналистика өлкәһендәге ҙур хазина. Яҡын киләсәктә үткән юлды хәтерләүсе шаһиттар иҫән саҡта, был оло хеҙмәткә тотоноусылар булыр, тип өмөтләнергә ҡала.

**ЭФИР ҺУЛЫШЫ —**
**ЗАМАН ТАУЫШЫ**



Илебеҙ үҙгәрештәр осоронда йәшәй. Башҡортостан радиоһында ла һуңғы 10 йылда иҫ китмәле үҙгәрештәр булды. Хәйер, был хаҡта даими тыңлаусыларыбыҙ ҙа хәбәрҙар, сөнки эфирҙағы яңылыҡ ҡолаҡҡа салынмай ҡалмай. Тапшырыуҙар даими яңыра, алып барыусыларға ла талаптар үҙгәрҙе.

Ашнаҡсынан — тәмле аш, төҙөүсенән матур йорт көткән кеүек, халыҡ беҙҙән сифатлы, үҙ зауығын ҡәнәғәтләндерерлек тапшырыуҙар, йыр-моң көтә.

Башҡортостан радиоһы бөгөнгө көндәрҙә бөтә республикаға һөйләүсе берҙән-бер радио булып ҡала.

Төрлө тулҡындарҙа сәйәхәт ҡылыуына ҡарамаҫтан, Башҡортостан радиоһының үҙ йөҙө, тотороҡло программаһы бар. Ә үҙгәрештәргә килгәндә, улар бихисап. Һуңғы йылдар радиобыҙ өсөн ысын мәғәнәһендә яңырыу осоро булды, яңы быуат компанияһы исемен аҡлау өсөн мөмкин булғандың барыһы ла эшләнде. Республика етәкселегенең ярҙамы менән техника өлкәһендә ҙур үҙгәрештәр яһалды. Яҡты, киң, заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған эфир студияһында эшләү үҙе бер ҡыуаныс. Журналистарҙың эш урынына компьютерҙар килде, Интернет, локаль бәйләнеш булдырылды. Былар һәммәһе лә тапшырыуҙарҙы әҙерләү ваҡытын күпкә ҡыҫҡарта. Тағы шуны әйтергә кәрәк: әгәр быға саҡлы тапшырыуҙы әҙерләүгә бер нисә һөнәр эйәһе йәлеп ителһә, бөгөн журналистар был эште башынан аҙағына тиклем бер үҙе башҡара ала. Хәбәрселәрҙең магнитофондары ла яңырҙы, ауыр репортерҙарға алмашҡа усҡа һыймалы минидискылар менән көйләнгән техника килде.

Етеҙ һәм сифатлы эшләүгә булышлыҡ иткән был саралар Башҡортостан мөстәҡиллегенең 10 йыллығын билдәләгән көндәрҙә тыңлаусыларыбыҙға йәнә бер матур бүләк эшләргә ярҙам итте: FM 105,5 йышлығында "Юлдаш" мәғлүмәт-күңел асыу каналы эшләй башланы (Етәксеһе — Миләүшә Ғәлиева). Башҡорт һәм татар телдәрендә өҙлөкһөҙ 16 сәғәт эшләүгә ҡоролған был каналдың тәүге аҙымдары ышаныслы һәм өмөтлө.

Киләсәктә рус телендә ошондай канал булдырыу күҙҙә тотола. Коллективтың ижады мөмкинлектәре был мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеүгә булышлыҡ итә. Йылдар буйы тупланған профессиональ оҫталыҡ та үҙ һөҙөмтәләрен бирә. Һуңғы йылдарҙағы тапшырыуҙар заман, реформалар һулышы, динамика менән һуғарылған. Баҙар шарттарында "Башҡортостан радиоһы" тигән исемгә тап төшөрмәү, абруйын арттырыу өсөн эҙмә-эҙлекле эш алып, барыла.

Ҡолас йәйеп, шул уҡ ваҡытта тормоштоң һәр өлкәһенә үтеп инеп эшләр өсөн ижади коллектив ете берекмәгә бүленгән. Һуңғы хәбәрҙәр, ашығыс репортаж һәм сығыштар өсөн тәғәйенләнгән яңылыҡтар хеҙмәте өс редакциянан тора: рус һәм башҡорт телендә сығарылыштар һәм ауыл хужалығы темаһына тапшырыуҙар (етәкселәре П.Самойлин, Р.Әбүләев). Оҙаҡ йылдар тыңлаусыларыбыҙҙы республикалағы һәм илдәге ижтимағи-сәйәси хәлдәр менән таныштырып килеүсе "Даирә" программаһы хәҙер инде "Дәүер"гә әйләнде. Унда эшләүсе журналистар ҙа эленән-әле алмашынып тора. Шуға ҡарамаҫтан, йәш, әммә тәүәккәл, талантлы комментатор Эльвира Айытҡолова етәкселегендәге коллектив әҙерләгән тапшырыуҙар, элеккесә, профессиональ камиллығы, оҫталыҡ йәһәтенән үҙенең абруйын юғалтмай. Ә бына "Ижад" һәм "Мираҫ" берекмәләрен бай тәжрибәле журналистар етәкләй. Ш.Бабич исемендәге

республика премияһы лауреаты Фәрзәнә Аҡбулатова эфирҙа әҙәбиәт, театр донъяһын яҡтыртыу өсөн яуап бирһә, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Зифа Фәйзуллина тыңлаусының сәнғәт, йыр-моңға ихтыяжы ҡәнәғәтләнеү өсөн барыһын да эшләй. Алда әйтеп үткән “Юлдаш” һәм рус телендәге “РОСТ” берекмәһе әҙерләгән программалар төрлө мәғлүмәт биреү һәм күңел асыуға ҡоролған. Төбәктәрҙә эшләүсе тиҫтәнән ашыу үҙ хәбәрселәребеҙҙе лә онотоп ҡуймайыҡ. Әгәр ҙә Урал аръяғы зонаһында — Нияз Алсыбаев, көньяҡ райондар буйынса Рәйсә Абдуллина, Бәләбәйҙә Зөбәржәт Әхтәрйәнова, Туймазыла Гөлсәсәк Зарипова кеүек уңған үҙ хәбәрселәребеҙ булмаһа, Башҡортостан радиоһы тапшырыуҙары күпкә ярлыраҡ, зауыҡһыҙыраҡ булыр ине.

“Беҙ — һәр йортта!” тигән девиз төрлө ҡатлам, төрлө милләт кешеләренең зауығын ҡәнәғәтләндереү бурысын ҡуя. Йәш үҙенсәлектәре лә иҫәпкә алына. Был эштә ҙур байлығыбыҙ — радионың “алтын фонды” ярҙамға килә. Тиҫтә йылдар буйы бер нисә быуын хеҙмәткәрҙәре бөртөкләп туплаған йыр-моң һәм әҙәби мираҫ әленән-әле эфир аша халыҡ күңеленә юл ала һәм өлкән йәштәге тыңлаусыларыбыҙҙы йәшлеккә алып ҡайтһа, йәштәргә, киреһенсә, уҙған йылдарҙың музыкаль байлығы менән танышырға мөмкинлек бирә. Бөгөнгө заман һулышы иһә ижтимағи-сәйәси һәм иҡтисади тапшырыуҙарҙа сағылыш таба. Һәр сәғәт башында эфирға сыҡҡан яңылыҡтар, иртәнге “Тормош, йәшәйеш һәм фекерҙәр” тапшырыуы, шулай уҡ “Экспресс-студия” (авторы Р.Сәрүәрова), “Бәләкәй эшҡыуарлыҡ” (И.Османова), “Эшлекле һөйләшеү” (И.Фәйрушина) кеүек программалар күптән инде тыңлаусыларҙа абруй яуланы.

Ә инде һәр кесаҙна һәм йомакөндәре аҙнаның мөһим ваҡиғаларына байҡау яһаған “Дәүер” (алып барыусылары Э.Айытҡолова, Ә.Батталова, А.Әйүпова) — даими программабыҙҙың биҙәге, ижтимағи-сәйәси программа әҙерләү һәм тура эфирҙа эшләү өлгөһө булып тора. “Тулҡын” (Ф.Аҡбулатова), “Аҡ биттәр” (О.Кузьменко), ижад һәм сәнғәт һөйөүселәр өсөн, “Моң” (З.Фәйзуллина), “Илһам” (Ф.Хәлитова) ижад һәм сәнғәт һөйөүселәр өсөн тәғәйенләнә. “Оло Башҡортостан” (Ф.Солтанова), “Дуҫлыҡ микрофоны”, “Аван-и” тапшырыуҙары халыҡтар дуҫлығы, берләшеү идеяһын сағылдыра. “Ваҡыт даръяһы” (А.Ярмуллин), “Үткәндәр ауазы” (Р.Ишембәтова) тарихҡа, халҡыбыҙҙың үткәндәренә сәйәхәткә алып сыға. “Юғары мәктәп”, “Педсовет” тапшырыуҙары фән, белем биреү мәсьәләләренә иғтибарҙы йүнәлтһә, “Сәләмәтлек”, “Табиб кәңәштәре” һаулыҡ һағында тора.

Ауыл хужалығы, ауыл тормошондағы үҙгәрештәр менән “Крәҫтиән мәсьәләһе (Т.Якупов), “Юл сатындағы ауыл” (З.Мәүлетбаев) радио журналында танышырға мөмкин. Рухи тормош, исламдың рухи ҡиммәттәре — тыңлаусыларыбыҙ көтөп алған “Иман” программаһында (С.Суҡбаев) сағыла. Үҫеп килгән быуын, йәштәр зауығын ҡәнәғәтләндерерҙәй программалар ҙа бихисап “Тамыр” студияһы әҙерләгән махсус тапшырыуҙарҙан тыш “Саҡматаш” (З.Арсаева), “Әрме маршы” (Э.Мостафина), “Тимер ҡаҙыҡ” (З.Ғирфанова), “Иң кәрәклеһе” (Н.Минашина) тигән тапшырыуҙар бөгөн рекламаға ла, маҡтауға ла мохтаж түгел, уларҙы йәштәр ихлас ҡабул итә һәм әүҙем ҡатнаша. Әлбиттә, иртәнге сәғәт 7-нән төнгө 1-гә тиклем өҙлөкһөҙ барған тапшырыуҙарҙың барыһын да һанап сығыу мөмкин түгел.

Операторҙар, машинисткалар, водителдәр, инженерҙар — йөҙҙән ашыу кешене берләштергән берҙәм коллективта һәр кемдең лайыҡлы урыны бар. Ә шулай ҙа күҙ төбәп торған кешеләребеҙҙең исемдәрен атап үтәһе килә: Әлфиә Әхмәтова, Рима Хөсәйенова, Ғәлимнур Бикбулатов, Лира Фәйзуллина кеүек һәр тыңлаусы танып торған абруйлы дикторҙарҙың ягымлы тауышы һаман да ҡолаҡ төбөндә яңғырай төҫлө. Бөгөн иһә тыңлаусыларыбыҙ Наилә Ғәләүетдинова, Әхәт Мортазиндарҙың һөйләүен кинәнеп тыңлай. Радио редакцияһындағы иң күп рәхмәт хаттары дикторҙарға булыуы ла был һөнәрҙең бер ниндәй күҙаллауҙарға ҡарамай оҙон ғүмерле буласағы хаҡында һөйләй.

Шулай итеп, Башҡортостан радиоһы, техник үҙгәртеп ҡороуҙар, профессионализм һәм оҫталыҡ, етеҙлек һәм ғәҙеллек мәсьәләләрендә үҙ бәҫен юғалтмай, ышаныслы алға бара. Мөстәҡил республикала барған үҙгәртеп ҡороуҙар Башҡортостандың иң киң информация сараһы — дәүләт радиоһы эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһаны. Киләсәктә лә шулай булһын.